***Тема: Ир-егеттең аҫылы ил эшендә беленә***
**Маҡсат:**

Зәки Вәлидиҙең тормош юлын өйрәнеү;
Арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән ғорурланыу, унын хеҙмәттәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу;
Телмәр өҫтөндә эшләү, фекерләү һәләтен үҫтереү;
Уҡыусыларҙа рух көсө тәрбиәләү, тормошҡа әҙерләү.

**Йыһазландырыу:** Проектор, китаптар күргәҙмәһе, портрет, видео яҙма, эпиграфтар.

**I. Ойоштороу:**

1. Ш.Бабичтың “Башҡорт халҡына көйлө хитап” шиғыры

Ышан, ышанғандай бер Аллаңа,
Зәки – һинең тоғро улығың,
Утҡа бешер Зәки, һыуға төшөр,
Әммә һатмаҫ намыҫ-күңелен…
*(Шиғыр юлдары интерактив таҡтала килеп сыға).*
**- Был шиғыр юлдары һеҙҙә ниндәй тойғолар уятты?**

(Ә.Вәлидиҙең үҙенең намыҫын һатмауы, иленә, халҡына тоғро булыуы тураһында һүҙ бара).

**2. Маҡсаттар менән таныштырыу:**

Эйе, бөгөн беҙҙең дәресебеҙ бөйөк ҡаһарманыбыҙ, илебеҙ азатлығы өсөн көрәшкән Ә.Вәлидигә арналған. Семинарға әҙерләнеп килергә һорауҙар бирелгән ине. Дәресебеҙҙе башлайыҡ. Бөгөнгө дәрестә беҙ төркөмдәргә бүленеп эшләйәсәкбеҙ.

- 1-се төркөм: Ғалимдар
- 2-се төркөм: Етәкселәр
- 3-сө төркөм: Тарихсылар
- 4-се төркөм: Сәйәсмәндәр
- 5-се төркөм: Яҙыусылар

**Дәрестең эпиграфы:**

(Экранда күрһәтелә)
Тормош ҡанундары – аяуһыҙ, рәхимһеҙ.
Ул, ике һүҙ менән әйткәндә, яҡшылыҡ менән яманлыҡ көрәшенән тора. Йәш иптәш, һин ошо көрәшкә, рухи һынауҙарға әҙерһеңме?

/Р.Низамиев./

**II. Төп өлөш:**

**1**. Кеше ғүмере бәхет менән иҫәпләнә, тиҙәр. Һеҙҙеңсә нимә ул бәхет?

/фекерҙәр тыңлау/

Эйе, бәхет кем өсөндөр ул байлыҡ, икенсе кеше өсөн мөхәббәт, өсөнсөләр өсөн уларҙың бөтәһе лә.

Ошоға бәйле бер әкиәт иҫкә төшә. Ниндәйҙер бер фәҡир ҡала уртаһындағы майҙанда ғүмере буйы хәйер һорашып торған. Бер көндө ул үлеп киткән. Йәлләү йөҙөнән ошонда уҡ ерләргә булғандар. ҡәбер ҡаҙырға тотонһалар, оло хазинаға юлыҡҡандар. Эй, меҫкен, кешегә гел усын һуноп торғансы, аяҡ аҫтындағы ни бары менән генә ҡыҙыҡһынһа ла серегән байға әйләнер ине, тигәндәр

Ниңә һеҙгә һөйләнем һуң? Ҡайһы саҡ беҙ үҙебеҙ ҙә шул Кеше хәленә ҡалмайбыҙмы Бөтө теләктәребеҙҙең тормошҡа ашыуын кемдәндер, күктән, хатта хөкөмәттән көтәбеҙ, килеп сыҡмаһа үпкәләйбеҙ, кемгәлер асыуланабыҙ. ә үҙ мөмкинселегебеҙ, зиһенебеҙ, рухыбыҙ көсөн абайламайбыҙ,үҙебеҙгә ышанмайбыҙ. Көстө, ныҡлыҡты үҙебеҙҙән эҙләмәйбеҙ.

Ә үҙеңә ярҙам итеүҙең иң ҙур ҡөҙрәте үҙеңдә икәнен белер өсөн, был ығы-зығылы заманда үҙ урыныңды табыр өсөн, тормош һынауҙарын үҙең өсөн беҙ, йәш быуын ниндәй булырға тейешбеҙ, бәхет сере нимәлә тигән һорауға бөгөнгө дәрестә яуап бирергә тырышырбыҙ. Ә һорауға яуапты эҙләп фажиғәле лә, ғибрәтле лә һәм бәхетле Зәки Вәлидиҙең яҙмыш юлынан йөрөп ҡайтайыҡ.

*Экранда З.Вәлидиҙең портреты күрһәтелә.*

*2.* Ә хеҙер беҙ командалар менән эшләп алайыҡ. *Уҡыусыларға тормош юлы менән ҡағыҙ биттәре таратылып бирелә. Һәм экранда терәк схема сыға.*

1. *З. Вәлиди ҡайҙа һәм нисәнсе йылда тыуған?*
2. *З. Вәлиди ниндәй ғаиләлә тәрбиәләнә?*
3. *З. Вәлидиҙең белемгә мөнәсәбәте нисек була?*
4. *1917 йылдың февраль революцияһын ул нисек ҡаршылай?*
5. *З. Вәлиди бөгөн кем буларак билдәле?*

1. *З. Вәлиди ҡайҙа һәм нисәнсе йылда тыуған?*

- Зәки Вәлидовтың тыуған төйәге — Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙендәге Көҙән исемле башҡорт ауылы. Мәскәүҙән ҡарағанда — урыҫ мәҙәниәте үҙәктәренән айырылған Көҙән — көнсығыш донъяһының мәҙәни үҙәктәренә яҡынырaҡ тойола.

2. *3. Вәлиди ниндәй ғаиләлә тәрбиәләнә?*
   - уҡымышлы;
   - атаһы Әхмәтшаһ мулла, мәҙрәсә, хаж;
   - әсәһе ғәрәп, фарсы һәм (чагатай) иҫке төрки телендә һөйләшә белгән. Ул ваҡытта көнсығыш белемле ғаиләләр һирәк күренеш булмай һәм һәр татар һәм башҡорт ауылында осрай;
   - олатаһы Вәлит- арҙаҡлы, абруйлы шәхес;
   - туған исемен бишенсе быуын олатаһы Иштуған хөрмәтенә ала;
   - әсәһе яғынан бабаһы Хәбибназар Ш.Мәржәни шәкерте, (Үтәктә мәҙрәсә тота.

***Һығымта яһағыҙ.***

**-Вәлидиҙәр ғаиләһендә тәрбиә нисек ҡуйылғанын әйтеп буламы? Төп принцип ниндәй булған?**

**-Йәш Зәки ниндәй сифаттарға бай тип уйлайһығыҙ?**

**-Кеше өсөн ғаиләнең роле ниндәй?**

(Экранда мәҡәл күрһәтелә).

**«Ояһында ни күрһә, осҡанында шул була».**

**-Вәлиди ғаиләһе кемдәр менән аралаша?**

**-Был аралашыуҙарҙың әһәмиәте нимәлә?**

***Һығымта яһағыҙ:***

**-Ә.Вәлидиҙең дуҫтары унын тәртибенә ниндәй йоғонто яһай?**

**-Кем менән аралашыуың, дуҫың кем булыуы ла тормошта ҙур роль уйнаймы?**

(Экранда мәҡәл күрһәтелә).

**«Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың».**

**-В8лиди т8рби84ен8 та2ы ла ним8 0ур йо2онто я4ай?** /йыр-мо6дар, хал5ыбы00ы6 ри98йәт - йолалары, 27р7ф-2808тт8ре, 808п 5анундары.

**-Сит илд8 я5ташыбы00ы6 ярат5ан йыры нинд8й бул2ан?**

/ «Илсе Ғайса» йырын ты6лау/

***Һығымта яһағыҙ:***

(Экранда мәҡәл күрһәтелә).

**Тыуған төйәк, тыуған тупраҡ – рухи таяныс.**

3. *3. Вәлидиҙең белемгә мөнәсәбәте нисек була? Ул ҡайҙа белем ала?*
   - 1908 йылдан башлап Зәки Вәлидов Ҡазанда Ҡасимия мәҙрәсәһендә уҡый, университетҡа инеү тураһында хыяллана, гимназия курсы буйынса имтихандарға үҙаллы әҙерләнә башлай. Күренекле татар

ғалимдары һәм яҙыусылары һәләтле һәм маҡсатына ынтылыусы, төпкөлдә йәшәп тә төрлө телдәрҙә һөйләшергә өйрәнгән, көнсығыштың урта быуат тарихын ғына түгел, Рәсәй шәрҡиәтселәренең хеҙмәттәре менән дә таныш булған йәш кешегә иғтибар итә. 1909 йылда Вәлиди шул уҡ Ҡасимия мәҙрәсәһендә төрки халыҡтары тарихы һәм ғәрәп әҙәбиәтенән белем бирә башлай.

***Һығымта яһағыҙ:***

- Ныҡышмалы рәүештә, тырышып , күп нәмәне үҙ аллы белем ала, күп уҡый, ҡыҙыҡһына, сит телдәрҙе теләп өйрәнә. Ә белем һәр кемгә лә тормошта кәрәк.

  (Экранда мәҡәл күрһәтелә).

**Белемле кеше – көслө кеше.**

1915 йылдан ул сәйәсәткә сума, Милли – азатлыҡ көрәшенә ҡушыла. Беренсе аҙым-Рәсәй мосолмандарының конгресында делегат була.

*4. 1917 йылдың февраль революцияһын ул нисек ҡаршылай?*

/«Йә раббым ошоның менән минең милләтемә лә бер ҡотолоу юлын ас»./

**- Ошо йылдарҙа Вәлидиҙең төп маҡсаты?**

**-Маҡсат тормошҡа ашһын өсөн ул нимәләр эшләй?**

- үҙ аллылыҡ идеяһын күтәреп сыға,
- «Башҡорт» гәзите,
- Башҡорт өлкә шураһы,
- 1-се,2-се, 3-сө ҡоролтайҙар,
- Вәлиди –хөкөмәт ағзаһы, юлбашсы.

***Һығымта яһағыҙ:***

Вәлиди халҡыныҙ азатлығы, үҙ аллылығы өсөн бөтәһен дә эшләй.

**-Граждандар һуғышы осорон ул нисек үткәрә?**

/З.Вәлиди тураһында видео яҙманан өҙөк күрһәтелә/

- Ленин, Троцкий, Сталин менән осраша, бәхәсләшә.
- Беренсе фарманын яҙа. /Уҡыусы йөкмәткеһен һөйләй/

**- Вәлидиҙең көрәштәштәре, арҡаҙаштары кемдәр?**

**- Бабичтың Вәлиди тураһында ниндәй әҫәре бар?**

(Ш.Бабичтың “Башҡорт халҡына көйлө хитап” шиғыры).

/шиғырҙан өҙөк уҡыу, Хәсәнова Ә./.

- **Был шиғыҙың йөкмәткеһендә нимә ята?**

***Һығымта яһағыҙ:***

Шул осорҙың ауыр заман йөгөн үҙ иңенә алған кешеләр бит улар.

Уҡыусыларға «Ер рухы» картинаһын күрһәтеү.

**-Был картинала һеҙ кемдәрҙе күрәһегеҙ?**

**-Ни өсөн Салауат, Вәлиди, Бабич бергә?**

*5. З. Вәлиди бөгөн кем булараҡ билдәле?*

- тарихсы,
- ғалим,
- этнограф,
- мемуарист,
- атаҡлы төрөк ғалимы.
- сәйәсмән.

- **Бөгөнгө көндә З.Вәлидиҙең тыуыуына нисә йыл?**

**III. Ә хәҙер уның яҙмыш юлынан йөрөп ҡайтайыҡ.**

1. *Шулай уҡ таҡтала З.Вәлидиҙең тормош юлы буйынса терәк схема күрһәтелә.*




Ошо терәк схема буйынса төркөмләп эшләү. Һәр төркөм З.Вәлидиҙе төркөм исемдәре буйынса әҙерләйҙәр һәм ҡыҫҡаса бер – береһенә һөйләп ишеттерәләр.
*(Алдан өй эше итеп З. Вәлиди буйынса мәғлүмәттәр әҙерләргә тейеш инеләр).*

А) **Ғалим**
**1908-1916**
**-Уның ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ, улар ниндәй телдәргә тәржемә ителгән?**

1939 йылда Дрезденда уның тормошондағы иң мөһим хеҙмәте — «Ибн — Фаҙландың юлъяҙмалары» баҫыла. Ибн — Фаҙландың китабына комментарийҙар Вәлидовҡа ғилми донъя киңлегендә ҙур билдәлелек алып килә.

Бынан тыш Германияла Вәлиди тағы бер нисә хеҙмәтен яҙа: «Ун ете ҡом менән ҡапланған ҡала һәм Садри Максуди бей», «Ислам һәм география фәне», «Һинд — иран сик өлкәләре тураһында тарихҡаса тикшереүҙәр һәм тюркология проблемалары», « Әль — Бируни төньяҡ халыҡтары тураһында», «9 — 10 быуаттарҙағы ғәрәп сығанаҡтары буйынса германдарҙың ҡылыстары», «Боронғо хорезмдарҙың теле һәм мәҙәниәте тураһында», «Урта быуатта Урта Азияла халыҡтың тығыҙлығы», «Боронғо төрки һәм монголдарҙа карта һәм картография проблемалары» һ.б. Һәм, ниһайәт, 1940 йылда Ҡаһирәлә Зәки Вәлидиҙең ҙур күләмле «Бөгөнгө Төркөстан һәм уның үткәне» (төрөк телендә) һәм Делиҙа инглиз телендә «Бируниҙың донъя картинаһы» сыға.

- Вәлиди исеме онотолмай. Йылдар уҙған һайын халыҡ хәтерендә тере ҡуҙҙай баҙлап яна.

**-Кемдәр уның тураһында ижад итте?**

**-Республикала исемен мәңгеләштереп нимәләр эшләнә?**

- Шуныһы ҡыуаныслы, бөгөнгө көндә З.Вәлиди исемен мәңгеләштереүгә иғтибар бүленгән. 1990 йылда Башҡортостанда уның исемендәге йәмәғәт премияһы булдырылды, 1992 йылда Республикабыҙҙың милли китапханаһына Ә.Вәлиди исеме бирелде, 1992 йылдан башлап Башҡортостанда халыҡ-ара Вәлиди уҡыуҙары үткәрелеп килә, Көҙән ауылында 1994 йылда музейы асылды, 2008 йылдан алып Зәки вәлиди исеме баш ҡалабыҙ Өфөнөң үҙәк урамдарының береһенә бирелде. Шулай уҡ яҡшы уҡыған студенттар өсөн З. Вәлиди исемендәге стипендия ла булдырылды.

**Б) Тарихсы**

- Тәүге үҙаллы тарихи — этнографик тикшереүҙәрен Вәлиди Бөрйән башҡорттары араһында башлай. 1913 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан «Шуро» журналының 19 — 22 һандарында уның башҡорт мәҙәниәте сығанаҡтары хаҡында мәҡәләләр тупланмаһы баҫыла.

Йәш тарихсының яҙмышында, уның ғалим булараҡ өлгөрөп етеүендә билдәле шәрҡиәтсе, Ҡазан университеты профессоры Н. Ф. Катановтың роле ҙур, ул Вәлидигә университетҡа уҡырға инергә әҙерләнгәндә, тәүге китабын нәшер иткәндә күп яҡлы ярҙам күрһәтә. 1913 йылда Н. Ф. Катанов Ҡазан университетына Вәлидовты тарихи — археографик тикшереүҙәр үткәреү һәм ориенталистика күҙлегенән ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған ҡиммәтле китаптар, документтар, ҡулъяҙмалар йыйыу өсөн Фирғәнәгә ебәрергә тәҡдим итә. Сәфәр уңышлы була, уның һөҙөмтәләре менән Петербург шәрҡиәтселәре лә ҡыҙыҡһына.

Академик В. В. Бартольд рекомендацияһы буйынса ошондай уҡ маҡсат менән 1914 йылда Рәсәй Фәндәр академияһы Зәки Вәлидовты Бохараға

йүнәлтә. Йәш ғалимдың был экспедицияһы тағы ла уңышлыраҡ була. Мәҫәлән, ул Ҡөрьәндең унынсы быуатҡа ҡараған төрки теленә тәржемәһен таба һәм уны Фәндәр академияһына алып ҡайта. Әлегә тиклем был ҡульяҙма Ҡөрьәндең төрки теленә иң боронғо тәржемәһе булып ҡала. Был экспедиция һөҙөмтәләрен юғары баһалап, академик Бартольд түбәндәгеләрҙе яҙа: « Урта Азияла әлеге ваҡытта мәңгелеккә юғалыу хәүефе алдында торған ҡульяҙма әҫәрҙәрҙе ҡотҡарыу, аргеографик һәм этнографик материалдарҙы йыйыуҙа халыҡтың ышанысы менән файҙаланған урындағы ғалимдарҙың файҙалы булыуы асыҡ, һәм был З. Вәлидовтың экспедицияһы менән кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилләнә». Ул ваҡытта йәш башҡорт ғалимы тарафынан Рәсәй Фәндәр академияһы өсөн тупланған ҡульяҙмалар коллекцияһы бөгөн дә шәрҡиәтселәргә «Вәлидов йыйылмаһы» тигән исем аҫтында билдәле".

**В)Башҡорт халҡының етәксеһе:**
**Г) Сәйәсмән һәм ғәскәр башлығы:**

- 1917 йылдың йәйендә ул беренсе һәм икенсе башҡорт ҡоролтайҙарында ҡатнаша, төп документтарҙы әҙерләй, шул уҡ ваҡытта съездарҙа, мосолман эшмәкәрҙәренең Петроградта, Мәскәүҙә, Ташкентта, Өфөлә үткән кәңәшмәләрендә әүҙем ҡатнаша. Бынан тыш, башҡорт ауылдарында булып, зыялылар һәм йәштәр менән осрашырға өлгөрә, башҡорт милли дәүләтселеген төҙөү буйынса киң хәрәкәт йәйелдереү өсөн ерлек әҙерләй. Был йәһәттән З. Вәлидов тарафынан яҙылған 1 — се һанлы фарман ҙур роль уйнай, унда большевиктар сәйәсәте граждандар һуғышына юл булараҡ баһалана, уларҙың ер сәйәсәте ҡабул ителмәҫлек булыуы билдәләнә, сөнки ул башҡорт крәҫтиәндәренең ергә борондан килгән хоҡуҡтарын юғалтыуға алып килә. 16 ноябрҙә ( яңы стиль буйынса) Башҡорт өлкә шураһы Башҡортостанды демократик Рәсәй составындағы автономиялы республика тип иғлан итә.

**-Шул ваҡытта уҡ башҡорттар араһында үҙ аллы дәүләт төҙәргә йәрәүе унын ниндәй Кеше булыуы тураһында һөйләй?**
**- Вәлиди – беҙҙең халыҡтың ғорурлығымы, фажиғәһеме?**
**-Әгәр Вәлиди идеялары шул ваҡытта уҡ тормошҡа ашҡан булһа, хәҙер илдең ниндәй булырын күҙҙаллап ҡарағыҙ. Ул сит илдә лә солтан була алған кеше. Башкортостанда ҡалһа, яҙмышы ниндәй булыр ине?**
**Д) Яҙыусы:**
- З.Вәлидиҙең ниндәй китаптарын беләһегеҙ?
(Китаптар күргәҙмәһе менән таныштырып китеү).

Е) **Башҡорт, татар, төрөк халыҡтары өсөн Ә. Вәлидиҙең әһәмиәте:**

- Факттар буйынса З.Вәлидиҙең немецтар менән хеҙмәтәшлек итеүе дөрөҫлөккә тап килмәй. З.Вәлиди бөгөнгө көндә лә йәштәр өсөн, башҡорт, татар, ғөмүмән барлыҡ төрки халҡы өсөн остаз булып ҡала. Ул васыят итеп ҡалдырған хеҙмәтәрен, уй-фекерәҙәрен йәштәргә еткерергә тейешбеҙ.

**-Бөгөн ил йөгөн иңенә күтәрерҙәй ир-егеттәребеҙ бармы, булһа кемдәр улар?**

***Һығымта яһағыҙ:***

Вәлиди ил хәстәрен иңенә алғанда уға 27 йәш була.

**-Вәлиди тормошта үҙ урынын, бәхетен тапҡанмы?**

- **Беҙгә, йәш быуынға, тормошта үҙ урыныбыҙҙы табыу әсән ниндәй сифаттар кәрәк, ҡайһыһы етешмәй, беҙгә ниндәй булырға кәрәк?**

***Һығымта яһағыҙ:***

Маҡсат ҡуя белеү.
Маҡсатҡа ирешеү юлдары:
-Белем.
-Ныҡышмалы хеҙмәт.
-Көслө рух.
-Тыуған тамырҙар.

**-Хәҙер әйтегеҙ инде, бәхет сере нимәлә?**

IV. **Дәресте йомғаклау:**

1.Кеше – көслө. Бер ҡасан да бәхет, изгелек, ғәҙеллек өсөн көрәштән баш тартырға тейеш түгел.

2.Көслө рухлы кешеләр генә тормош карабын үҙ ҡулында тота ала.

3.Юғалып ҡалма, сөнки тормош – ул үҙе көрәш, бәхет өсөн көрәш. Бәхет өсөн хатта сират күперен дә үтергә кәрәк , тиҙәр. Ә ул ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер.

- /халыҡ бәхет, ирке, үҙ аллылығы өсөн көрәштең һөҙөмтәһе – ғүмере буйы сит илдә тыуған илен һағынып, зар-интизар булып йәшәү./ 4.Бөгөнгө көндә тормош һынауҙарына бирешкән кешеләр бармы, булһа кемдәр улар?

  **-Башҡорт ниндәй булырға тейеш?**

5.Был донъяла бирешмәҫ өсөн ҙур тормошта ошоларға таяныгыҙ:

- ғаилә,
- белем,
- мөхит, яҡшы дуҫтар,
- үҙ хеҙмәтегеҙ, көсөгөҙ,
- исем, фамилия, милләттегеҙ.

**V. Баһалау:**

**VI. Өйгә эш:** 3.Вәлидиҙең портретын яҙып килергә.

А)Портретын төшөрөргә;

Б) Портретын яҙырға.